Муниципальное автономное учреждение дополнительного образования
«Информационно-методический центр»
городского округа город Стерлитамак Республики Башкортостан

СОГЛАСОВАНО
Директор МАУДО «ИМЦ»
ГО г.Стерлитамак РБ
__________Берлизова Р.Я
«_____»__________2017г.

УТВЕРЖДЕНО
На заседании ГЭС
Протокол №
от__________2017г

# ПРОГРАММА ЗАНЯТИЙ ГОРОДСКОЙ ШКОЛЫ «ЭРУДИТ» ПО ПРЕДМЕТУ «БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК»

**для учащихся 6-8 классов**
**на 2017-2018 учебный год**

Составитель:
Шарафутдинова Зульфия Тальгатовна
Учитель башкирского языка и литературы
Высшей категории
МАОУ «Гимназия №3 имени Джалиля Киекбаева»
Г.Стерлитамак

СТЕРЛИТАМАК 2017 г.

**Расписание занятий**

| ФИО руководителя | Предмет | Класс | ОУ | Время работы | Кабинет |
|---|---|---|---|---|---|
| Шарафутдинова Зульфия Тальгатовна | башкирский язык | 6-8 | МАОУ «Гимназия №3 имени Джалиля Киекбаева» | пятница 15.00. – 16.30 | 42 |

**Дәрестәр теҙмәһе**

| Уҡытыусыһы | Предмет | Класс | Белем биреү учреждениеһы | Үткәреү ваҡыты | Кабинет |
|---|---|---|---|---|---|
| Шәрәфетдинова Зөлфиә Тәлғәт ҡыҙы | башҡорт теле | 6-8 | МАДББУ «Жәлил Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназия» | йома 15.00. – 16.30 | 42 |

## Аңлатма яҙыу

Һуңғы йылдарҙа башҡорт теленең морфологияһын өйрәнеүгә арналған хеҙмәттәр һаны йылдан-йыл арта бара. Морфология — грек һүҙе. Уның «морфе» өлөшө «форма», ә «логос» өлөшө «тәғлимәт», «фән» тигәнде аңлата. Морфология бүлеге һүҙҙәрҙең үҙгәреше тураһындағы фән булып, төрлө грамматик категориялар яһалыуын өйрәнә.

Мәктәптә уҡыусыларға башҡорт телендәге һүҙ төркөмдәре, уларҙың үҙгәреше тураһында белем биреү бик ҙур әһәмиәткә эйә.

«Башҡорт теленең морфологияһы» курсында һүҙ төркөмдәре түбәндәге йүнәлештәрҙә өйрәнелә: морфологик билдәләре, грамматик категориялары һәм синтаксик вазифалары.

Телдең морфология бүлеген өйрәнеү телдең нескәлектәрен, факттарын дөрөҫ баһалай белеү һәләтен камиллаштыра, телдәге һүҙҙәрҙең, терминдарҙың мәғәнәһен аңлау, уларҙы дөрөҫ һәм урынлы ҡулланыу күнекмәһен булдыра. Шулай уҡ ғилми-тикшеренеү эшенә ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра, эҙләнеү һәләтен үҫтерә.

Курстың программаһы башҡорт теленең морфологияһы буйынса баҫылған хеҙмәттәр нигеҙендә төҙөлдө. Ул һүҙ төркөмдәрен тәрәнәйтеп һәм ентекле өйрәнеүҙе күҙ уңында тота. Телде һиҙемләү һәләтен үҫтереүгә, телмәр культураһын тәрбиәләүгә булышлыҡ итә.

Курс барышында уҡыусыларҙың интеллектуаль фекерләү һәләте, аралашыу телмәре үҫешә һәм улар тел шәхесе итеп тәрбиәләнә.

**Курстың маҡсаты**: башҡорт теленең морфологияһын, уның төп төшөнсәләрен өйрәнеү.

**Курстың бурыстары**:

- уҡыусыларға башҡорт телендәге һүҙ төркөмдәренең бүленешен, уларҙың үҙенсәлектәрен төшөндөрөү;
- морфологик анализ эшләү күнекмәһен булдырыу;
- терминологик аппараты үҫтереү;
- телгә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**Уҡыусылар эшмәкәрлеген ойоштороу алымдары:** фронталь, индивидуаль, төркөмләп эшләү.

**Дәрес формалары:** лекциялар, семинарҙар, практик дәрестәр.

Дәрестә өйрәнеләсәк теоретик материал лекция формаһында аңлатыла. Артабан практик эштәр башҡарыла. Сөнки теоретик материалды күнегеүҙәр, ижади эштәр ярҙамында нығытыу белемде төплө үҙләштереүгә булышлыҡ итә.

**Үҙләштерелгән белемде тикшереү формалары:** үҙ аллы эштәр, ижади эштәр, контроль эштәр.

**Курс барышында уҡыусы** 1) һүҙ төркөмдәрен билдәләй; 2) һүҙҙең грамматик категорияларын айыра; 3)һүҙҙе төрлө грамматик категорияларға ҡуя белергә **өйрәнергә тейеш.**

**Курсты үткәндән һуң уҡыусы**:

- морфологик төшөнсәләрҙең билдәләмәләрен белергә;

- өйрәнелгән грамматик күренештәрҙе текстан эҙләп табырға;
- һүҙгә морфологик анализ яһай белеү күнекмәһенә **эйә булырға тейеш.**

**Ҡулланылған педагогик технологиялар:**

1. *Проблемалы уҡытыу технологияһы* (уҡыу барышында баланы һәр ваҡыт эҙләнеүсе роленә ҡуйыу. Фәнни дөрөçлөктө ул үҙе асҡан кеүек хис итә. Белемгә уҡыусы үҙенең көсө, үҙенең эҙләнеүе аша эйә булырға тейеш. Фәнде ул ятламаһын, ә үҙе эҙләп тапһын).
2. *В.Ф.Шаталовтың терәк схемалар системаһы* (материал блоклап өйрәнелә. Уны үҙләштергәндә терәк схемаларға, терәк конспекттарға таяныла, өйҙә шулар буйынса ҡабатлау үткәрелә. Дәрестә материал бер нисә тапҡыр тикшерелә. Тәүҙә уҡыусыларҙың үҙләштереү дәрәжәһе асыҡлана, икенсе тапҡыр ҡабатлағанда алынған белемдәрҙе дөйөмләштереү һәм системаға һалыу иғтибар үҙәгендә була).
3. *Компьютер технологияһы* (дәрестә компьютер мөмкинселектәрен файҙаланыу).
4. *Индивидуаль уҡытыу технологияһы* (уҡытыусының һәр уҡыусы менән индивидуаль эш алып барыуы).
5. *Аҡыл-аң эшмәкәрлеген эҙмә-эҙлекле формалаштырыу технологияһы* (яңы теманы ҡабул итеү бер нисә этап аша бойомға ашырыла).
6. *Үçтереүсе уҡытыу технологияһы* (уҡыусы тыңлаусы ғына түгел, фекерләүсе, эҙләнеүсе, белем алыусы ла. Ул дәрестә уҡытыусы менән тиң ҡатнашырға һәм эшләргә тейеш).
7. *Хеҙмәттәшлек технологияһы* (уҡытыусы менән уҡыусының бергә эшләүе, улар араһында субъект – объект түгел, субъект – субъект мөнәсәбәттәре күҙҙә тотола).

## Курстың йөкмәткеһе

Лингвистика бүлеге буларак морфология. Хәҙерге башҡорт телендә һүҙ төркөмдәре системаһы. Һүҙҙәрҙе һүҙ төркөмдәренә бүлеүҙең принциптары. Телмәрҙә үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең роле.

Һүҙ төркөмө буларак исем, уның дөйөм категория мәғәнәһе, морфологик билдәләре, синтаксик функцияһы. Башҡорт телендә һан, килеш, исемдәрҙең эйәлек һәм хәбәрлек категориялары.

Һүҙ төркөмө буларак сифат. Морфологик үҙенсәлеге, синтаксик функцияһы. Сифат дәрәжәләре; сифаттарҙың яһалышы, уларҙың дөрөҫ яҙылышы.

Һүҙ төркөмө буларак һан, уның морфологик билдәләре, синтаксик функцияһы. Ябай һәм ҡушма һандар, һан төркөмсәләре. Нумератив һандар, һандарҙың дөрөҫ яҙылышы.

Һүҙ төркөмө буларак алмаш, уның морфологик билдәһе, синтаксик функцияһы. Алмаштарҙың һөйләмдәге роле. Алмаш төркөмсәләре. Алмаштарҙың үҙгәреше.

Һүҙ төркөмө буларак ҡылым, уның морфологик билдәләре, синтаксик функцияһы. Ҡылым төркөмсәләре, йүнәлештәре, күләмдәре, рәүешлеге. Ҡушма ҡылым.

Һүҙ төркөмө буларак рәүеш, уның дөйөм категория мәғәнәһе, морфологик билдәләре һәм синтаксик функцияһы.

Рәүеш төркөмсәләре. Сифаттарҙың рәүеш урынында ҡулланылыуы. Рәүештәрҙең сағыштырыу һәм артыҡлыҡ дәрәжәләре. Рәүештәрҙең яһалышы һәм уларҙың дөрөҫ яҙылышы

Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәренә дөйөм характеристика; уларҙың үҙ аллы һүҙ төркөмдәренән айырмалыҡтары.

Һүҙ төркөмө буларак бәйләүес. Бәйләүестәрҙең мәғәнәһе һәм телмәрҙәге роле. Бәйләүестәрҙең бүленеше. Бәйләүестәрҙең синтаксик функцияһы.

Һүҙ төркөмө системаһында теркәүестең урыны. Теркәүестәрҙең төрҙәре.

Һүҙ төркөмө системаһында киҫәксәнең урыны.

Мөнәсәбәт һүҙҙәр тураһында дөйөм төшөнсә.

Һүҙҙең айырым бер разряды буларак ымлыҡ. Ымлыҡтарҙың төп функцияһы. Ымлыҡтарҙың семантик разряды.

Оҡшатыу һүҙҙәре тураһында дөйөм төшөнсә.

Һүҙҙәргә морфологик анализ яһау. Текст өҫтөндә эш. Бәйләнешле телмәр өҫтөндә эш.

**Календарь-тематик план**

| № | Темалар | Сәғәт-тәр һаны | Үткәреү ваҡыты | Уҡыусылар эшмәкәрлеге төрҙәре | Иҫкәр-мә |
|---|---|---|---|---|---|
| 1-2. | Инеш. Морфология. Башҡорт телендә һүҙ төркөмдәре. | 2 | 13.10<br>13.10 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, бирелгән эштәрҙе үтәйҙәр | |
| 3-4. | Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше. Исемдәрҙең эйәлек заты. Бәйләнешле телмәр өҫтөндә эш. | 2 | 20.10<br>20.10 | Тыңлайҙар, фекер алышалар, һорауҙар бирәләр, бирелгән эштәрҙе үтәйҙәр | |
| 5-6. | Исемдәрҙең хәбәрлек заты. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Исемдәргә морфологик анализ. | 2 | 20.10<br>27.10 | Тыңлайҙар, бирелгән эштәрҙе үтәйҙәр, һығымта яһайҙар | |
| 7-8. | Сифат. Сифаттарҙың һөйләмдәге роле. Сифаттарҙың исемләшеүе. Текст өҫтөндә эш. | 2 | 27.10<br>03.11 | Тыңлайҙар, анализлайҙар, һығымта яһайҙар | |
| 9-10. | Төп һәм шартлы сифаттар. Сифаттарҙың яһалышы. Бәйләнешле телмәр өҫтөндә эш. | 2 | 03.11<br>03.11 | Тыңлайҙар, бирелгән эштәрҙе үтәйҙәр, һорауҙар бирәләр | |
| 11-12. | Сифат дәрәжәләре. Сифаттарҙың дөрөҫ яҙылышы. Текст өҫтөндә эш. | 2 | 10.11<br>10.11 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, нығыталар, яҙма эш башҡаралар | |
| 13-14. | Синоним сифаттар. Сифаттарға морфологик анализ. | 2 | 10.11<br>17.11 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, индивидуаль эш башҡаралар | |
| 15-16. | Һан тураһында төшөнсә. Ябай һәм | 2 | 17.11<br>17.11 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | ҡушма һандар. | | | күнегеүҙәр эшләйҙәр | |
| 17-18. | Һан төркөмсәләре. Үлсәү һүҙҙәре. Текст өҫтөндә эш. | 2 | 24.11<br>24.11 | Тыңлайҙар, төркөмдәргә бүленеп эшләйҙәр, нығыталар | |
| 19-20. | Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы. Һандарға морфологик анализ. | 2 | 01.12<br>01.12 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, күнегеүҙәрҙе үтәйҙәр | |
| 21-22. | Алмаш. Алмаштарҙың морфологик билдәләре. Алмаштарҙың килеш менән үҙгәреше. Текст өҫтөндә эш. | 2 | 08.12<br>08.12 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, яҙма эш башҡаралар, һығымта сығаралар | |
| 23-24. | Алмаш төркөмсәләре. Алмаштарға морфологик анализ. | 2 | 08.12<br>15.12 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, күнегеүҙәр эшләйҙәр | |
| 25-26. | Ҡылым. Ҡылымдың зат һәм һан менән үҙгәреше. Бәйләнешле телмәр өҫтөндә эш. | 2 | 15.12<br>22.12 | Тыңлайҙар, бирелгән эштәрҙе үтәйҙәр, һорауҙар бирәләр | |
| 27-28. | Ҡылым төркөмсәләре. Исем ҡылым. Уртаҡ ҡылым. Текст өҫтөндә эш. | 2 | 22.12<br>29.12 | Тыңлайҙар, үҙ фекерҙәре менән бүлешәләр, күнегеүҙәр башҡаралар | |
| 29-30. | Сифат ҡылым. Сифат ҡылымдың заман формалары. Текст өҫтөндә эш. | 2 | 29.12<br>29.12 | Тыңлайҙар, фекер алышалар, төркөмдәрҙә эшләйҙәр, нығыталар | |
| 31-32. | Хәл ҡылымдың төрҙәре. Хәл ҡылымдың төрҙәре һәм синтаксик роле. | 2 | 12.01<br>12.01 | Тыңлайҙар, индивидуаль эш башҡаралар, һығымта яһайҙар | |
| 33-34. | Ҡылым йүнәлештәре. Текст өҫтөндә эш. | 2 | 12.01<br>19.01 | Тыңлайҙар, бирелгән эштәрҙе | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | үтәйҙәр, һорауҙар бирәләр | |
| 35-36. | Ҡылым һөйкәлештәре. Ҡылымдарҙың заман формалары. | 2 | 19.01<br>26.01 | Тыңлайҙар, һорауҙарға яуап бирәләр, төркөмдәрҙә эшләйҙәр | |
| 37-38. | Ҡылым рәүешлеге. Ҡылым күләмдәре. Бәйләнешле телмәр өҫтөндә эш. | 2 | 26.01<br>26.01 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, бирелгән эштәрҙе башҡаралар | |
| 39-40. | Телмәрҙә синоним ҡылымдарҙы ҡулланыу. Ҡылымдың һөйләм төҙөүҙәге урыны. | 2 | 02.02<br>02.02 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, яҙма эш эшләйҙәр | |
| 41-42. | Ҡылымдың һөйләмдәге функциялары. Ҡылымдарға морфологик анализ. | 2 | 02.02<br>09.02 | Тыңлайҙар, фекер алышалар, төркөмдәрҙә эшләйҙәр, нығыталар | |
| 43-44. | Рәүеш. Рәүеш төркөмсәләре. Бәйләнешле телмәр өҫтөндә эш. | 2 | 09.02<br>16.02 | Тыңлайҙар, индивидуаль эш башҡаралар, һығымта яһайҙар | |
| 45-46. | Рәүештең сифат менән оҡшаш һәм айырмалы яҡтары. Рәүеш дәрәжәләре. Текст өҫтөндә эш. | 2 | 16.02<br>16.02 | Тыңлайҙар, бирелгән эштәрҙе үтәйҙәр, һорауҙар бирәләр | |
| 47-48. | Рәүештәрҙең яһалышы. Тамыр, яһалма һәм ҡушма рәүештәр. | 2 | 02.03<br>02.03 | Тыңлайҙар, индивидуаль эш башҡаралар, һығымта яһайҙар | |
| 49-50. | Рәүеш яһаусы ялғауҙар. Рәүештәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Рәүештәргә морфологик анализ | 2 | 09.03<br>09.03 | Тыңлайҙар, индивидуаль эш башҡаралар, һығымта яһайҙар | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 51-52. | Теркәүес тураһында төшөнсә. Теркәүестәрҙең бүленеше. Бәйләнешле телмәр өҫтөндә эш. | 2 | 16.03<br>16.03 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, бирелгән эштәрҙе башҡаралар | |
| 53-54. | Теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Текст өҫтөндә эш. Теркәүестәргә морфологик анализ. | 2 | 23.03<br>23.03 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, бирелгән эштәрҙе башҡаралар | |
| 55-56. | Бәйләүестәр. Уларҙың бүленеше. Бәйләнешле телмәр өҫтөндә эш. | 2 | 23.03<br>30.03 | Тыңлайҙар, фекер алышалар, төркөмдәрҙә эшләйҙәр, нығыталар | |
| 57-58. | Бәйләүестәрҙе телмәр-ҙә дөрөҫ ҡулланыу. Текст өҫтөндә эш. Бәйләүестәргә морфологик анализ. | 2 | 30.03<br>06.04 | Тыңлайҙар, индивидуаль эш башҡаралар, һығымта яһайҙар | |
| 59-60. | Киҫәксә. Киҫәксә-ләрҙең бүленеше. Бәйләнешле телмәр өҫтөндә эш. | 2 | 06.04<br>13.04 | Тыңлайҙар, фекер алышалар, төркөмдәрҙә эшләйҙәр, нығыталар | |
| 61-62. | Киҫәксәләрҙең дөрөҫ яҙылышы. Текст өҫ-төндә эш. Киҫәксәләр-гә морфологик анализ. | 2 | 13.04<br>13.04 | Тыңлайҙар, индивидуаль эш башҡаралар, һығымта яһайҙар | |
| 63-64. | Мөнәсәбәт һүҙҙәр. Мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе төркөмләү. Морфологик анализ. | 2 | 20.04<br>20.04 | Тыңлайҙар, фекер алышалар, төркөмдәрҙә эшләйҙәр, нығыталар | |
| 65-66. | Ымлыҡтар.Оҡшатыу һүҙҙәре. Текст өҫтөндә эш. | 2 | 20.04<br>27.04 | Тыңлайҙар, бирелгән эштәрҙе үтәйҙәр | |
| 67-68 | Һүҙ төркөмдәре буйынса белемдәрҙе тикшереү. Йомғаҡлау | 2 | 27.04<br>27.04 | Йыллыҡ эштәргә йомғаҡ яһайҙар | |
| | **Бөтәһе** | **68** | | | |

## Ҡулланылған әҙәбиәт


1. Аслаев Т.Х., Исламғолова Ы.Ә. Уйнат, уйлат баланы: Уҡытыусы өсөн ҡулланма. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1993. – 208 бит.
2. Башҡорт теленең һүҙлеге: 55 мең һүҙ. Ике томда: I том (А-М). – М., 1993. – 862 бит; II том (Н-Я). – М., 1993. – 814 бит.
3. Грамматика современного башкирского литературного языка. – М: Наука, 1981. – 496 с.
4. Кейекбаев Ж.Ғ. Хәҙерге башҡорт теле. – Өфө: БДУ, 2001. – 147 б.
5. Ураҡсин З.Ғ., Ишбирҙин Э.Ф., Ҡотлобаев Г.М., Әхтәмов М.Х. Ҡыҙыҡлы грамматика. – Өфө, 1979. – 151 бит.
6. Хәҙерге башҡорт теле. Педагогия институтының башланғыс кластар факультеты өсөн дәреслек. – Өфө, 1986. – 400 бит.
7. Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт телендә модаллек категорияһы. – Өфө, 1975. – 162 б.
8. М.В.Зәйнуллин. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле. Морфология. – Өфө: БДУ, 2002. – 388 б.